ЭТНОГРАФИЯ

# Башҡортостан һәм башҡорттар — иғтибар үҙәгендә

*”Ватандаш” журналы редакцияһында Берлин Ирекле Университеты Тюркология институты магистры **Себастиан Цвиклински** булып китте. Йәш ғалим донъя кимәлендә билдәле фәнни үҙәктә татар һәм башкорт проблемалары менән шөғөлләнә. Ул Башкортостанға тәүге тапкыр студент сағында ук килә, унан һуң да даими булып тора. Башкорт ғалимдары фекеренсә, Цвиклинскиҙың исемен, йәш булыуына карамаҫтан, күренекле немец тюркологтары Маргарет Эрсен-Раш һәм Барбара Кельнер фон Хейнкеле исемдәре менән йәнәшә куйырға мөмкин. Ул донъя тюркологтары араһында ла ҙур абруй яулап өлгөргән. Себастиан — бик ихлас, ифрат ҙур эрудициялы, иғтибарлы әңгәмәсе лә. Һүҙ Себастиан Цвиклинскиға.*

— Мин 1970 йылда элекке Германия Демократик Республикаһы баш ҡалаһы Көнсығыш Берлинда тыуғанмын. 1976 йылда беҙҙең ғаилә ҙур ҡыйынлыҡ менән Көнбайыш Берлинға күсә алды. Мин, мәктәпте тамамлағас, Ирекле Университетҡа уҡырға индем. Унда 1993 йылдан алып Тюркология институтында башҡорт һәм татар телдәре өйрәтелә. Был эште Маргарет Эрсен-Раш көйләп ебәрҙе. Ул үҙе киң билдәле тюрколог, заманында Төркиәлә эшләй. Институт директоры Барбара Кельнер иһә тюркология менән АҠШ-та, Индиана университетында шөғөлләнә башлай. Ошо ике ханым бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә Германияла тюркология фәнендә башҡорт һәм татар йүнәлешен тергеҙеүгә өлгәште. Берлиндан тыш, башҡорт теле Майнц университетында ла уҡытыла — унда предметты Михаэль Гесс алып бара.



*Себастиан Цвиклински «Ватандаш» журналының баш мөхәррире Фәрит Әхмәҙиев менән*

Мин университетта ҡулланылған интенсив методика буйынса татар һәм башҡорт телдәрен өйрәнә башланым. Өфөлә, Ҡазанда даими булып торам.

1994 йылдың йәйендә бер айға яҡын Бөрйән районында йәшәнем, башҡорт халҡының бөгөнгө хәле менән яҡындан таныштым. Ул турала коллегам Антония Вилке мәҡәлә яҙҙы. 1996 йылда Маргарет ханым аша минең ҡулға ”Ватандаш” журналының иң тәүге һаны килеп эләкте. Унда тарих, тел ғилеме буйынса бик мәғлүмәтле мәҡәләләр баҫылғайны. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, журналдың башҡа һандарын күрә алманым, әммә һуңғы йылдарҙа Интернетта баҫманың сайты асылды. Үҙ йүнәлешем буйынса материал тапһам, ҡыҙыҡһынып уҡыйым. Бына ошо рәүешле мин тюркология фәненә килдем.

Магистр диссертацияһын әҙерләгәндә башҡорттарҙың һәм татарҙарҙың II Донъя һуғышы йылдарында Германиялағы хәленә ҡағылышлы байтаҡ ҡыҙыҡлы материалдар таба алдым. Билдәле булыуынса, ул осорҙа Германияла тюркология фәне ярайһы уҡ алға китә. Тикшеренеүҙәр раса проблемалары буйынса идаралыҡ, уның етәксеһе Альфред Розенберг күрһәтмәләре нигеҙендә алып барыла. Был шәхес этнографтар араһында ярайһы уҡ билдәле. Ул Балтик буйынан, остзее немецтарынан. Атаһы батша Рәсәйендә күренекле ғалим-этнограф иҫәпләнә.

Советтар Союзы менән һуғыш башланғас, Германияға бик күп әсирҙәр килтерелә, уларҙың иҫәбе миллиондарға етә. Немец хәрбиҙәре араһында төрлө милләт вәкилдәрен айырып белеүселәр бик аҙ була. Мәҫәлән, 1941 йылда Кавказ халыҡтары вәкилдәрен, төркиҙәрҙе, йәһүдкә оҡшатып, әсиргә төшөү менән аталар. 1941—1942 йылдарҙа әсирлеккә эләккән башҡорттарҙың һәм татарҙарҙың 80 проценты һәләк була. Ошо сәбәпле Зәки Вәлидиҙең Германияға килеп, татарҙарҙың һәм башҡорттарҙың хәлен еңеләйтергә тырышып йөрөүе билдәле. Ул үҙ яҡташтарын Төркиәгә алып сығырға ынтылып ҡарай, әммә Германия яғы ла, төрөктәр ҙә быға ҡаршы килә. Шулай ҙа әсирлектәге төркиҙәрҙең, мосолмандарҙың хәле еңеләйә төшә.

Рейхсфюрер Гиммлер төрлө милләт вәкилдәренән СС Ваффен дивизиялары төҙөй башлай, ләкин уларҙы оккупацияланған территорияларҙағы төп милләт вәкилдәренән, волонтерҙарҙан, йәғни, русса әйткәндә, добровольцтарҙан ғына туплайҙар. Әммә әсирҙәр был категорияға ҡарамай. Башҡорттарҙы һәм татарҙарҙы вермахт ҡарамағына тапшырып, ”Идель—Урал” легионына йәлеп итәләр. Әлбиттә, был буш иллюзия була, әммә күптәр уға ышана. Күҙ уңында Германия протектораты нигеҙендә төҙөлгән Иҙел—Урал штаты тотола. Уның президенты тип эмигрант Шәфи Алмас күрһәтелә. Коллаборационистар ”Идель—Урал” гәзите, ”Татар әдәбияты” журналы сығара башлай. Улар латин графикаһында баҫтырыла. Легионға сыуаштар ҙа алынғас, улар өсөн ”Атал—Урал” гәзите нәшер ителә. ”Идель—Урал” гәзите аҙна һайын 8 биттә, журнал айына бер сыға. Шәфи Алмас гәзиттең баш мөхәррире вазифаһына Муса Йәлилде тәҡдим итә, әммә уны оҙаҡламай ҡулға алалар. Татар телендә радио тапшырыуҙары ла ойошторола. Китаптар ҙа сығарып өлгөрәләр, уларҙы легионда тараталар. Бынан тыш, Ғаяз Исхаҡиҙың ”Милли юл” журналы ла таратыла. Һуғыштан һуң Шәфи Алмас американыларға хеҙмәткә күсә, ”Азатлыҡ” радиоһында татар-башҡорт редакцияһы ойоштора. Германияла йәшәүсе татарҙар һәм башҡорттар һуғыштан һуң төрлө архивтарҙа һаҡланған ”Идель—Урал” гәзите, ”Татар әдәбияты” журналының һандарын, китаптарҙы табып, күсермәләр эшләй.

2004 йылда ул күсермәләр комплекты Татарстан Республикаһы вәкилдәренә тапшырыла. Нисек кенә булмаһын, ул сығанаҡтар мөһим тарихи документ иҫәпләнә һәм үҙ өйрәнеүселәрен, тикшеренеүселәрен көтә. Нәҡ ошо тема минең магистрлыҡ диссертацияһының нигеҙен тәшкил итте.

Әлеге мәлдә мин кандидатлыҡ диссертацияһы менән мәшғүлмен. Һуңғы йылдарҙа Ҡазанда һәм Өфөлә сит илдәрҙә йәшәгән зыялылар менән ҡыҙыҡһыныу көслө. Төркиәлә, Германияла йәшәгән күренекле башҡорттар һәм татарҙар, уларҙың эштәре, фәнни хеҙмәттәре киң билдәле. Мин, шуларға өҫтәп, Японияла йәшәгән төркиҙәрҙе өйрәнергә булдым. Тема тюркологтар араһында бик ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Мәғлүм булыуынса, революциянан һуң байтаҡ башҡорттар Колчак менән китә, күптәре аҙаҡ Манчжурия, Япония аша Төркиәгә, Көнбайыш илдәренә юл ала. Японияլағы төркиҙәрҙең һаны 6 мең кешегә етә. Араларында бик уҡымышлы зыялылар ҙа күп була. Мин миҫалға бер күренекле шәхес тураһында ғына әйтеп үтәм. Ул — Ғәбдрәшит Ибраһимов. Ул Санкт-Петербургта йәшәп өлгөрә, Өфөлә һәм Ҡазанда гәзиттәр сығара, Диниә назараты ағзаһы итеп һайлана. Японияға барып сыҡҡас, Токиола төпләнә һәм унда имам вазифаһында Ғәбделхәй Ҡорбанғәлиевты алмаштырып, Япония диниә назараты ойоштора. Назарат менән 1984 йылға тиклем Өфөнән һәм Ҡазандан сыҡҡан кешеләр етәкселек итә һәм остаздары эшенә тоғро ҡала.

Ғәбдрәшит Ибраһимов, Япония диниә назаратының беренсе мөфтие булараҡ, Индонезия, Малайзия мосолмандары менән ныҡлы бәйләнештәр урынлаштырып, ундағы ислам дине үҫешенә бик көслө интеллектуаль йоғонто яһап өлгөрә. Ошо эштә ул Сауд Ғәрәбстаны, Төркиә ярҙамына, Япония хөкүмәтенә ныҡ таяна. Ул донъялағы мосолман илдәренең күпселегендә булып өлгөрә. Бөгөнгө көндә 25 миллион кеше йәшәгән Малайзияла ислам дәүләт дине булып тора, ул иҡтисади яҡтан бик үҫешкән. Ә 195 миллион кеше йәшәгән Индонезия донъялағы иң ҙур мосолман дәүләте иҫәпләнә — ундағы халыҡтың 95 проценты төп халыҡ, мосолмандар, бик аҙы ғына индустар һәм ҡытайҙар. Мосолман лидерҙары заманында милли азатлыҡ яулау, аҙаҡ коммунизм хәүефенә ҡаршы тороу эшендә ҙур әүҙемлек күрһәтте. Ғәбдрәшит мөфтиҙең исемен Малайзия һәм Индонезия мосолмандары, зыялылар, дәүләт етәкселәре ҙур ихтирам менән иҫкә ала. Һуңғы йылдарҙа Ғәбдрәшит Ибраһимов шәхесе менән Ҡазан, Өфө зыялылары ла, ниһайәт, ҡыҙыҡһына башланы. Минең уйымса, ”Ватандаш” журналы биттәрендә, башҡа баҫмаларҙа ла уның исеме, эштәре яҡын киләсәктә мотлаҡ урын табасаҡ. Бындай шәхесте үҙ илендә онотмаҫтар, тип ышанам.

Мин әлеге көндә ”Биографик сығанаҡтар халыҡ-ара мәҙәни аспектта” халыҡ-ара программаһы менән хеҙмәттәшлек итәм. Был йүнәлеш тә ”Ватандаш” журналы эшмәкәрлеге менән тап килә. Баҫмала төрки тарихында мөһим урын билләгән күренекле шәхестәр тураһындағы материалдар йыш донья күрә. ”Ватандаш” кеүек абруйлы баҫма ошондай халыҡ-ара программалар кимәленә сығып, донъя тюркология фәне үҫешенә ҙур өлөш индерә ала.

*Закир ШАКИРОВ*
*әҙерләне.*